# ”ГӘЛСӘР ҺАНДУҒАС” СЫҢЫ



**Йыр бәйгеләре бихисап. Әммә һуңғы йылдарҙа айырыуса популярлыҡ яулаған ”Гәлсәр һандуғас” конкурс-фестивале үҙенең асыштары, табыштары менән ифрат ҡыуандыра. Бәйгене әйҙәүселәрҙең береһе, Башҡортостан телевидениеһының ”Гәлсәр һандуғас” продюсер үҙәгенең художество етәксеһе Земфира Байбулдина беҙгә ошо хаҡта һөйләне.**

Башҡортостан — йырҙар иле. Классик опера арияларына торғоһоҙ бәҫле боронғо башҡорт йырҙары ”Буранбай”, ”Сибай”, ”Ҡолой кантон”, ”Томан”, ”Әрме”, ”Ғилмияза”... Күңелдәрҙе күтәрерлек, дарманыңды арттырырлыҡ заман моңдары. Ошо илһам байлығын кәметмәй, юғалтмай килер быуындарға илтеү — изге бурыс. ”Урал моңо”, ”Дуҫлыҡ йыры”, ”Ирәндек моңдары”, ”Башҡорт йыры” һәм башҡа йырмоң бәйгеләре тап ошоға хеҙмәт итә лә инде. ”Гәлсәр һандуғас” бәйгеһе лә ошо йәһәттән ыңғай асыштарға булышлыҡ итте. Профессиональ

*Земфира Байбулдина Ғафури районы Сәйетбаба ауылында тыуып үҫкән. Башҡорт дәүләт университетында белем алған, Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр бүлеген тамамлаған. Хеҙмәт юлын М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында башлай, бер үк ваҡытта Башҡортостан телевидениеһында хаттар буйынса ”Йырым булһын бүләгем” тапшырыуын әҙерләй.*

*Өс йылдан ашыу ”Сәләм” программаһын алып барыусы журналист, популяр ”Аулаҡ” тапшырыуының авторы, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәсүл Ҡарабулатов менән бергәләп ”Гәлсәр һандуғас” бәйгеһен тамашасыға илтеүсе.*



йырсылар һәм башланғыс музыка белеме булған башҡарыусылар араһында барған был фестиваль-конкурс халҡыбыҙҙың бик күп илаһи моң байлығын асыуы менән әһәмиәтле. Конкурстың төп бурысы — йәш башҡарыусылар араһынан талантлы йәштәрҙе эҙләп табыу һәм уларға үҙ һәләттәрен асырға ярҙам итеү, заман эстрада ижадын үҫтереү. Шул ыңғайҙан йыр ижад иткән композиторҙар, шағирҙар, аранжировка эшләүселәрҙең хеҙмәтенә баһа биреү. Проект авторы Луиза Азамат ҡыҙы Фархшатова уны тап ошо йүнәлештә күҙаллағайны ла инде. Һуңғы йылдарҙа бәйгенең майҙаны киңәйҙе, унда байтаҡ өр-яңы номинациялар булдырылды. Әгәр тәүге йылдарҙа ”Гәлсәр һандуғас” бәйгеһе Өфөлә генә уҙғарылһа, 2004 йылда ул Башҡортостан Республикаһының төрлө төбәктәренә юл алды. Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Баймаҡ, Учалы, Нефтекама ҡалаларында уҙғарылған төбәк бәйгеләрендә ҡатнашыусылар һаны ла бермә-бер артты. Әйтәйек, Стәрлелә — 50 кеше, Баймаҡта 80 йәш егет һәм ҡыҙ ”Гәлсәр һандуғас”та ҡатнашырға теләк белдерҙе. Тимәк, беҙгә күберәк һәләтле йәштәрҙе асыҡлау, уларҙың оҫталығын халыҡҡа күрһәтеү мөмкинлеге артты.

”Гәлсәр һандуғас” бәйгеһен ойоштороусылар коллективы артыҡ ҙур түгел. Уларҙың һәр береһе ошо абруйлы тамашаны юғары кимәлдә ойоштороп күрһәтеүҙе үҙенең изге бурысы тип иҫәпләй.

Тамашаларҙы ҡуйыусы режиссер Илмар Әлмөхәмәтов, телевидение режиссеры Ирәндек Иҙрисов, проекттың продюсеры Рита Өмөтбаева, администраторҙар Айгөл Мәҡсүтова, Марсель Юлмөхәмәтов, Оксана Мөхәмәтйәнова, Гөлнара Шәриповаларҙың тырыш хеҙмәте нигеҙендә тамашасылар һәр саҡ һоҡланып ҡараған бәйге-тамаша тыуа.

Проект авторҙары фестивалдә ҡатнашыусыларға бәйге өсөн йырҙар табыуҙа, аранжировка эшләүҙә, сәхнәлә сығыш яһау өсөн кейем һайлауҙа ҙур ярҙам күрһәтә. Артабан йәштәргә, сосораҡ булып, ошо мөмкинлекте тулыһынса файҙаланырға ҡала. Аудио-, видеокассеталар сығарыу ҙа күпкә еңелләшә.

2004 йыл лауреаттарын айырып атап үтке килә, сөнки улар төбәктәрҙә еңеп сыҡҡандан һуң йырсылар бәйгеһендә тағы бер тапҡыр үҙ талантын раҫланы. ”Йыл асышы” номинацияһында Баймаҡ районынан Мар-

сель Ҡотоев еңеп сыҡты. "Өмөт" призын Учалы егете Илдар Усманов яуланы. "Йыл йыры" номинацияһында үҙешмәкәр композитор Наил Шәймәрҙәнов менән шағирә Кәүсәриә Шафиҡова еңеүсе тип билдәләнде. Йырсыларҙан был призды ошо авторҙарҙың "Ҡоштар китә" йырын оҫта башҡарған Хәсән Усманов яуланы. Фәдис Ғәниев иһә "Тамашасы һөйөүе" номинацияһында еңеүсе булды. 2004 йылда "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Юлдаш" радиоканалы үҙенең өр-яңы номинацияһын булдырғайны — "Тыңлаусы ятратҡан йыр" тип атала ул. Был абруйлы исемгә танылған йырсы Азамат Тимеров лайыҡ булды. "Йыл клибы" номинацияһында Флүзә Фархшатова төшөргән клип еңеүсе тип табылды. "Ретро йырҙар" номинацияһында Рөстәм Ғиззәтуллин еңеп сыҡты. Бөтә еңеүселәргә лә 1000 доллар күләмендә бүләк бирелде. Бынан тыш "Йыл асышы" номинацияһы лауреаты Марсель Ҡотоевҡа "БТВ-медиа" студияһы 100 мең һумлыҡ гранд тапшырҙы. Тимәк, Марсель был аҡсаға аудио-, видеокассеталар сығара ала.

"Гәлсәр һандуғас" беҙҙе үҙенең табыштары, асыштары менән ҡыуандыра. Әйтәйек, 2003 йылда "Йыл асышы" номинацияһында еңеп сыҡҡан талантлы йырсы Рәүилә Мәсәлимованың "Ваҡыт" йыры әле иң популяр йырҙарҙың береһе. Ғөмүмән, ул башҡарған халыҡ йырҙары өр-яңы биҙәлеш менән яңғырай, күңелдәрҙе арбай.

"Гәлсәр һандуғас" бәйгеһе танылған йырсыларыбыҙҙы, халҡыбыҙҙың моңло йырҙарын быуындан-быуынға илтеүгә ҙур өлөш индергән йырсыларҙы һәм йыр ижад итеүселәрҙе лә хөрмәтләй. Унда "Башҡорт сәнғәтендә фиҙакәр хеҙмәте өсөн" номинацияһы ҡаралған. Был номинация буйынса приз 2001 йылда "Башҡортостан һандуғасы" Фәриҙә Ҡудашеваға, 2002 йылда — йырсы Флүрә Килдейәроваға, композитор Салауат Низаметдинов менән шағир Рәмил Сурағолға, 2003 йылда — йырсы Рамазан Йәнбәковҡа, шағирә Дилә Булгакова менән үҙешмәкәр композитор Урал Рәшитовҡа һәм 2004 йылда шағирә Гөлфиә Юнысова менән композитор Роза Сәхәүетдиноваларға бирелде.

"Гәлсәр һандуғас" бәйгеһе 2005 йылда ла дауам итә. Әммә быйыл беҙ, элекке кеүек, төбәктәргә үҙебеҙ сыҡмайбыҙ. Бәйгелә ҡатнашыусылар Башҡортостан телестудияһында өр-яңы ҙур павильонда сығыш яһаясаҡ. Унда сәхнә лә, тамаша залы ла ҡаралған. Әле ижади коллектив эҙләнеүҙәр өҫтөндә эшләй. Быйыл бәйгенең шарттары ла бер аҙ үҙгәрҙе. Әгәр элек унда 18 йәштән 45 йәшкә тиклемгеләр ҡатнашһа, хәҙер 17 йәштән 35 йәшкә тиклемге егеттәр һәм ҡыҙҙар ҡатнаша ала.

"Гәлсәр һандуғас" сыңы тынмай, киләсәктә лә моңо кәмемәҫ, тип ышанғы килә. Беҙгә ошо абруйлы бәйгенең бәҫен төшөрмәй, тамашасылар ихлас ҡабул иткән фестиваль-конкурс кимәлен һаҡлау мөһим.

*Зөһрә Камалова яҙып алды.*